# Күңелле минуттар



**Өфө-2016**

БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ МӘҒАРИФ МИНИСТРЛЫҒЫ

Өфө ҡалаһы ҡала округы Муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы Мостафина Фатима Хәмит ҡыҙы исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы

**Күңелле минуттар.** Физкультура минуттары өсөн шиғырҙар. Төҙөүсе: Э. С. Хәсәнова.

Был ҡулланмала башҡорт теле дәрестәрендә ял минуттары өсөн шиғырҙар бирелә.

Китап уҡытыусыларға, педагогик белем алыусы студенттарға тәғәйенләнә.

**Хәсәнова Эльмира Салауат ҡыҙы**

башҡорт теле һәм әҙәбиәте

уҡытыусыһы

# Күңелле минуттар

(физкультура минуттары өсөн шиғырҙар)

Өфө-2016

## БАШ ҺҮҘ

Ғалимдар фекеренсә, физик күнегеүҙәр кешенең күңелен күтәрә, кәйефен яҡшырта.

Көн һайын биш йәки алты дәрес уҡыған уҡыусы дәрестәрҙә тиҙ арый. Дәрестә күҙ, ҡулдар, кәүҙә, бигерәк тә арҡа һәм муйын мускулдары тиҙ тала. Дәрестәрҙә ял минуттары үткәргәндән һуң, балаларҙың арыуҙары бер аҙға онотолоп тора, иғтибарҙары ҡабат әүҙемләшә, яңы материалды ҡабул итеү һәм үҙләштереү һәләттәре арта.

Уҡыусылар дәрестәрҙә арымаһын, төҙ кәүҙәле булһын, яҡшы күрһен өсөн дәрестәрҙә физкультура минуттары үткәрергә кәрәк.

Бер үк шиғыр һәм хәрәкәтте оҙаҡ ҡулланыу ялҡыта, шуға күрә уларҙы алмаштырып торор кәрәк. Уҡыусыларҙың йәш үҙенсәлегенә, дәрестең темаһына һәм эш төрҙәренә ҡарап, ял минуттарын уҡытыусы үҙе һайлай. Дәрес темаһын яктырткан, уға аңлатма биргән физкультура минуттары өсөн уҡыусылар тарафынан ижад ителгән күңелле шиғырҙар тәкдим итәм.

# Һөйләм киҫәктәре

Камила Ҡыуатова,

5-се класс уҡыусыһы



**Эйә** китте бер
һыҙыҡтан,

(уң ҡулды күтәрергә)

**Хәбәр** ике Һыҙыҡтан.

(ике ҡулды ла күтәрергә)

**Аныҡлаусы** тулҡын бирә,

(ҡулдар менән тулҡын эшләйҙәр)

**Тултырыусы** өҙөп һыҙа,

(Һауала өҙөк һыҙыҡтар һыҙалар)

**Хәл** һыҙыҡ нөктә һыҙып ҡуя.

(Һауала һыҙыҡ һыҙалар, сәпәкәй итәләр)



## Һүҙ төркөмдәре

**(Исем, сифат, һан, алмаш, ҡылым, рәүеш)**

**Илгиз сыға** (атлайҙар)

**һарайға,** (әйләнәләр)

**ат ҡамыты** (ҡулдарҙы өҫкә күтәрәләр)

**рәтләргә.** (ултыралар)





# Сифат дәрәжәләре

Кинйәбулатов Мораҙым, 6-сы класс уҡыусыһы

Сифат дәрәжәләрен,

Йыйҙы ҡунаҡҡа сәйгә. (ҡулдарҙы йәйәләр)

<u>Төп</u> ҡунаҡ булып килгән

Тәпәш матур күк сәскә. (ҡулдарҙы өҫкә күтәреп, ҡул суҡтарын һелкетергә)

<u>Сағыштырып</u> ҡараш һала,

Ҡатыраҡ бешкән һалма. (ҡулдарҙы алға һуҙырға, билдәргә ҡуйырға)

<u>Артыҡлығын</u> аңлаған

Түп – түңәрәк бер ярма. (уңға-һулға бороло рға)

<u>Аҙһытыуға</u> бирешкән,

Һарғылт, әскелтем алма. (ҡулдарҙы аҫҡа төшөрөргә, урындарға ултырырға)

# Төп һандар



Кәримова Йәмилә, 5-се класс уҡыусыһы

Бер – баҫайыҡ,

киреләйек.



Ике тигәс,

эйеләйек.

Өс тигәндә тура баҫ,

Дүрт тигәндә



сүкәйҙек,

Биш тигәс тә

баҫайыҡ,

Алты тигәс,



бер-бер артлы

аяҡтарҙа һикерәйек.

Ә етелә ултырайыҡ.





# Ҡылым һөйкәлештәре



Ҡотлосурина Зөлхизә,

8-се класс уҡыусыһы

**Бойрам һиңә, егет, һаҡла иленде**

(ҡулдарҙы алға һуҙырға, бөйөргә таянырға)

**Хәбәрем шул: көләләр минән, беҙҙән.**

(ҡулдарҙы күтәрергә, бөйөргә таянырға)

**Күтәрелһә дошман, шартың булһын,**

(аяҡ остарына баҫырға, кире төшөргә)

**Тупланайыҡ бергә, был теләк беҙҙән!**

(ҡулдарҙы өҫкә күтәрергә, аҫҡа төшөрөргә)